*Таңсулпан ҒАРИПОВА*

# УЛ ЙӘШӘГӘН ЕР

*(Очерк)*

Баймаҡ районының Хәсән ауылы Сибай ҡалаһына һыйынып тигәндәй ултырған. Ара яҡын булһа ла, халыҡтың көнитмеше төрлөсә. Ҡала халҡы йәй ялға китеүсән, ә ауылда был саҡта эш ҡыҙа, совхоз малына аҙыҡ әҙерләү булһынмы, ҡураларҙы ҡышҡа әҙерләүме — барыһы ла эш ҡулдары талап итә. Ә эшсе көстәр ауылда, бигерәк тә уларҙың ҡалаға терәлеп ятҡандарында, һәр саҡ етешмәй.

Ауылда ул саҡта мәктәп балаларына ике ҡулын кеҫәһенә тығып урамда «эт һуғарып» йөрөү юҡ ине. Уҡыуҙар бөткәс, күп булһа бер аҙна ял тейеп ҡаламы, юҡмы — бесәнгә ҡыуалай башлайҙар. Йәрмөхәмәтовтар ғаиләһе лә ошо оло ҡаҙанда ҡайнай, ғаилә башлыҡтары Фәүкинур апай менән Ғөбәйҙулла ағайҙар үҙҙәре лә көн-төн эштәләр, балалары ла ҡайһыны ҡайҙа эш менән мәшғүл. Ә инде 1948 йыл тыуған Зиннур бигерәк тә үҙаллылығы, эшлекле һәм етди булыуы менән айырыла. Бесән ваҡытында ул ат тырмаһына ултыра, ашлыҡ өлгөрөүгә — ырҙын табағында мәж килә. Бына шул бесән ваҡыттары Зиннурҙың бала саҡ хәтирәләренә юйылмаҫлыҡ сағыу буяуҙар һала ла инде.

Кис. Көнө буйы эшләп арыған аттарҙы тышап аҡланға ебәргәс, үҙең һәм тәбиғәт менән күҙмә-күҙ ҡалаһың. Донъяңды онотоп һандуғас моңон тыңлайһыңмы, һаҡ менән Суҡ һағышына ҡолаҡ һалаһыңмы, Ирәндек тауҙарына шәфәҡ нурынан тартылған шаршауҙы тамаша ҡылаһыңмы — бөтәһе лә һинең ихтыярыңда. Ошондай моңло тынлыҡҡа сумған кистәрҙә бесәнсе малайҙар тау башына менеп ултырырға ярата. Төрлө хәлдәр, тарихи шәхестәр хаҡында әңгәмәләр ҡорола. Фронтовиктар ҡорға килеп ултырһа, малайҙарҙың күҙе яна, ҡыҙыҡһыныуҙары йөҙҙәренә бәреп сыға, йөрәк тибештәре йышая.

Бер көндө малайҙар эргәһенә килгән берәү ҡорманынан ҡурай сығара. Ҡурайсының үлән ҡурайынан ағылған талғын моң киске тымыҡ һауала әллә ҡайҙарға китә. Һуғышҡа тиклем дә, һуғыштан һуң да мандып китә алмаған тәпәш кенә ауыл өйҙәре тағы ла моңһоулана төшкәндәй. Алтын өҫтөндә йәшәп, алты көн дә рәхәт күрмәгән халыҡтың яҙмышы ҡурай моңо аҫтында тағы ла аянысыраҡ... Хәйер, моң бит ул шундай нәмә — кемгә нисек тәьҫир итә. Һабаҡташтарынан етдиерәк тә, буйсаныраҡ та Зиннур Йәрмөхәмәтовҡа ул айырыуса ныҡ тәьҫир итә, уны ваҡытынан алда баласаҡ вайымһыҙлығынан сығара, күңелен уйға һала, үҙенең ваҡ-төйәк мәшәҡәттәренән башҡа олораҡ хәсрәттәр, олораҡ ғәмдәр — халыҡ ғәме барлығын төшөндөрә. Бала аҡылы буйламаҫтайҙы ул йөрәге менән тоя. Ҡурай-

сының ҡурайынан сыҡҡан моң уға йөрәк тауышын тыңларға өйрәтә. Буласаҡ лидерҙың күңелен халҡына һәм еренә һөйөү менән тултыра. Әйткәндәй, беҙҙең халыҡта «Ир ирҙән быуаҙый» тигән мәҡәл бар. Ишетер ҡолаҡҡа, бәлки, ул ятышлы ла түгелдер, мәгәр был осраҡ — шуның классик миҫалы кеүек. Йәш үҫмер күңеленә ниндәй орлоҡ сәсеп киткәнен һәм ул орлоҡтарҙың киләсәктә ниндәй үрсем бирәсәген, билдәле, ул ҡурайсы үҙе лә шәйләмәгәндер...

Мәгәр былары — һуңыраҡ. Әкиәт кенә тиҙ һөйләнә, тиҙәр. Йәрмөхәмәтовтар ғаиләһе тиҙҙән Сибайға күсә. Сибай әле ул саҡта яңы ҡала статусын алған ҡасаба. Күпселеге — саман өйҙәр, халыҡ башлыса шахтала, тимер юлында эшләһә лә, ярҙамсыл хужалыҡҡа таянып йәшәйҙәр, мал, ҡош-ҡорт аҫырайҙар.

Ҙурмы, бәләкәйме, ҡала — ҡала инде. Зиннурға бында үҙ мөмкинлектәрен асырға шарттар күберәк. Мәктәптә ул спорт, шахмат түңәрәктәренә йөрөй. Һабаҡташы һәм дуҫы Нух менән (яҙыусы Наил Ғәйетбаев) үҙҙәрен ижад эшендә лә һынап ҡарайҙар. «Башҡортостан пионеры» гәзитенә тәүге мәҡәләләрен дә яҙып оҙата улар. Наил Ғәйетбаев күңелендәге ижад орлоҡтарына тәүге бураҙнаһын, бәлки, шул ваҡытта тапҡандыр, ә Зиннур Йәрмөхәмәтовтың күңелен күберәк спорт, техника биләй. Спорт менән ул Сибай тау техникумына ингәс тә ныҡлап шөғөлләнә. Спорттың күп кенә төрө буйынса 1-се разрядлы спортсы булып етешә. Спорт унда ихтыяр көсө, ныҡышмалылыҡ, ваҡытты әрәм-шәрәм итмәү, сәм кеүек сифаттар тәрбиәләргә ярҙам итә. Әйткәндәй, күптәр өсөн спорт үҫмер йылдар шөғөлө, ғүмерҙең бер арауығы хәтирәләре генә булып ҡалһа, Зиннур Йәрмөхәмәтовты ул ғүмере буйына оҙатып килә һәм әле лә унан айырылырға уйламай. Сәләмәт тәндә — сәләмәт рух, тигәндәй, буласаҡ лидер көстөң ай-һай күп кәрәк буласағын әйтерһең шул саҡта уҡ тойған...

Шәхес төшөнсәһенә яуап биргән күп кенә кешеләрҙең биографияһына күҙ һалһаң, шул күҙгә ташлана — улар үҙаллы тормош юлын иртәрәк башлаған. Күрәһең, был да тәбиғәт законы. Ҡоштар, ана, балаларын ҡаурыйы сығыу менән ояһынан этеп төшөрә. Шунһыҙ улар осорға өйрәнә алмаҫтар ҙа ине. Зиннур Ғөбәйҙулла улы ояһынан иртә осоп төшә. Техникум бөткәс, Ҡаҙағстанға эшкә ебәреләә, унан һуң армия сафына алына, шунда ҡанат нығыта, бауыр ҡалҡыта. Армиянан ҡайтҡас Сибай баҡыр-көкөрт комбинатында эшләп алғандан һуң Магнитогорск ҡалаһында Тау-металлургия институтына уҡырға инә. Юғары уҡыу йортон тамамлағас, тыуған ҡалаһына ҡайтып эшләү теләге нисек кенә көслө булһа ла, уны Силәбе өлкәһенең Бакал ҡалаһына эшкә ебәрәләр. Ситтә йөрөгәндә беҙҙең халыҡҡа белемле кешеләрҙең ни дәрәжәлә кәрәк булыуын Зиннур Йәрмөхәмәтов тағы ла нығыраҡ төшөнә. Ике йыл эсендә институттың экономика факультетын тамамлай. Әммә иленә ашҡынған йәш патриотты Сибайҙа бер кем дә ҡолас йәйеп ҡаршы алырға тормай. Бында йәнә Йәрмөхәмәтов холҡондағы ныҡышмалылыҡ, спорт кешеләренә хас сәм үҙенекен итә: ул, ҡайтып, тәҙөләшкә слесарь булып урынлаша. «Илгә ҡайтыуҙың ояты юҡ, — тип уның был теләгенә фатиха бирә зат-ырыуы ла. — Кеше илендә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан булғаның арыу».

Мәгәр тырыш, ойоштороу һәләте күренеп торған егетте тиҙ иғтибарға алалар һәм рудникка хеҙмәт һәм эш хаҡы бүлеге начальнигы итеп тәғәйенләйҙәр. Ә инде 1981 йылда отҡор, ташып торған энергиялы, белемле, үҙен бынамын тигән ойоштороусы итеп танытҡан белгесте рудниктың партия ойошмаһы секретары итеп һайлайҙар.

Ошо осорҙа ул ғаилә ҡорорға, атай булырға өлгөрә. Иң мөһиме — ойоштороу эшенең бөтә ҡатмарлы һәм нескә серҙәренә төшөнә. Етмәһә, рудник комбинат хужалығының

иң төп һәм ауыр участкаһы. Абруйлы етәксе булыр өсөн үҙенә күп белергә, йөктөң ауырын үҙенә тартырға тура килә. Үҙаллы юлға иртә баҫҡан, ситтә сынығыу алған Йәрмөхәмәтов бында ла һынатмай: 1985 йылда уны Башҡортостан баҡыркөкөрт комбинатының партия ойошмаһы секретары итеп һайлайҙар. Ул йылдарҙа беҙҙең халыҡҡа юғары органдарға үтеү мөмкинлегенең сикләнгәнлеген иҫәпкә алғанда, Зиннур Ғөбәйҙулла улының хоҡуҡтары район партия комитеттарына тиңләтелгән ҙур ойошманың етәксеһе булып һайланыуы ысын мәғәнәһендә ҙур еңеү була.

Ат туйған ерендә, ир тыуған ерендә, тиҙәр. Ҡалаға нигеҙ һалыуысы һәм уны тотоп тороусы ҙур сәнәғәт предприятиеһының төп етәкселәренең береһе булыу Йәрмөхәмәтовтан ҙур яуаплылыҡ талап итә. Кешеләр менән аралашыу, ойоштороу эштәрен башҡарыуҙан тыш, комбинаттың перспективаһы, стратегик пландары менән дә булашырға тура килә. Ҡырҡҡа ла етмәгән Зиннур Йәрмөхәмәтов үҙ йәшенән иртәрәк олоғайырға, етмеш йәшлек уҙаман аҡылы менән ҡоралланырға мәжбүр була. Эше һәм биләгән вазифаһы унан шуны талап итә.

...Һәм бына 1990 йыл. Тормош үҙе мәңге үҙгәреп тороусан тере организм. Республика һәм бөтә Рәсәй масштабындағы үҙгәрештәр Сибай ҡалаһын да уратып үтмәй. Бәлки бында, Сибайҙа, һәр үҙгәреш киҫкенерәк төҫ ала торғандыр: халыҡ хисле, тәьҫораттар, хис-тойғолар ашып-ташып та китеүсән. Ҡала башҡарма комитетына тәүге демократик нигеҙҙәге һайлауҙар алдынан халыҡ умарталай гөжләй. Ҡала халҡының күп өлөшө комбинатта эшләгәнлектән, энергиялы, етди, һәр мәсьәләгә конкрет күҙлектән ҡараусан, кешене аңлай һәм тыңлай белгән партия ойошмаһы секретары Йәрмөхәмәтовтың рейтингы ла ҙур. Кемдәрҙер уны маҡтай, кемдәрҙер: «Тарта алмаҫ, ул идеолог, ә бында производственник кәрәк», — ти. Кемгәлер уның ерле халыҡ араһынан үҫеп сыҡҡан лидер булыуы оҡшай, ә кемгәлер юҡ. Бәндәгә ай менән ҡояш та ярамай, тигәндәй, был осраҡта ла төрлө ҡараш, төрлө хәбәрҙәр йөрөй. Халыҡтың да бит төрлөһө бар. Берәүҙәр позитив үҙгәрештәр көтә, икенселәр булғанына шөкөр итә, үҙгәрештәрҙән ҡурҡа ла. Халыҡтың ана шул үҙгәрештәр көткән өлөшө плакаттар тотоп урамға сыға, Йәрмөхәмәтов шәхесенә үҙенең киләсәген, яҡты өмөтөн бәйләй.

Халыҡ менән бергә Зиннур Йәрмөхәмәтов та был мәлдә тынғыһыҙ көндәр, йоҡоһоҙ төндәр кисерә. Етмәһә, «Булдыра алмаҫ!» тигән һүҙҙәр сәменә тейә. Майҙан тотмай бил нығынмай икәнен кем-кем, ҡара йәшенән ярышта көс һынаған кеше булараҡ, ул белә бит инде. Икенсенән, ни өсөн уның тыуған еренә ғүмер баҡый кемгәлер сеймал сығанағы ролен үтәү яҙған! Ни өсөн уның тоҡомдаштары, ошо ерҙең хужалары әҙәмсә йәшәүҙән мәхрүм? Ни өсөн Сибай һаман да Хоҙай тарафынан онотолған бер һоро мөйөш булып ята бирә? Беләктә көс, йөрәктә дәрт бар сағында ни өсөн әле ул ошо бахыр көнитмеште йырып, Сибай өҫтөнә ҡояш сығарыу хәстәрен үҙ өҫтөнә алмаҫҡа тейеш? Был йоҡоһоҙ төндәрҙә уның ҡолағына теге бала сағында ҡурайсының ҡурайынан ағылған моң аҙ салынманы, аҙ яғылманы. Эйе, Зиннур уны йөрәге менән ҡабул иткән шул саҡ. Хәҙер, кем олоһо, кем кесеһе, ике бала атаһы, ғаилә башлығы булғас, ул моң бигерәк тә сағыуыраҡ, аһәңлерәк яңғырай...

* * *

Ерле халыҡты яҡшы белеү Йәрмөхәмәтовҡа тиҙ арала эшлекле һәм үҙен ярты һүҙҙән аңлаған команда тупларға ярҙам итә. Сибай Йәрмөхәмәтов етәкселек итә башлағанға тиклем диңгеҙ төбөнә батҡан, ләм ултырған, тик торбалары ғына ундабында һерәйеп торған пароходты хәтерләтһә, яңы етәксе килгәндән һуң ҡаланы өҫкә сығарыу, күтәреү эше башлана.

Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовтың фиҙакәрлеге һәм Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың яҡлауы һәм аңлауы арҡаһында һуңғы тиҫтә йыл эсендә Сибай ҡалаһы совет власы осоронда етмеш йыл дауамында өлгәшә алмаған бейеклеккә күтәрелә. Төбәк элек үҙенә бер нәмә ҡалдырмайынса донор сифатында йәшәһә, һуңғы йылдарҙа республика бюджетынан алған инвестициялары сағыштырыуһыҙ арта. Дөйөм күтәрелеш һиҙелә ҡала сәнәғәтендә лә: 1998 йылда Башҡортостан баҡыр-көкөрт комбинаты сеймал эшкәртеүҙе 12, ә төҙөлөш материалдары етештереүҙе 72 процентҡа арттыра.

1991 йылда тәбиғи таш эшкәртеү цехы асыла; 1993 йылда Таштау карьеры сафҡа индерелә; 1995 йылда Балтатау руда бирә башлай; 1996 йылда Юбилейный ятҡылығында эш башлана.

Ошо йылдарҙа «Сибайконсервмолоко» асыҡ акционерҙәр йәмғиәте яңы төр продукция — «Нутрилак», «Нутрилак-2», «Нутрилак-соя», ҡарабойҙай, һоло, дөгө ҡатыш бутҡа консервалары, «Нутризон», «Солнышко», «Колобок» тигән ҡатнашмалар, майонез, аҡ май һәм эремсек десерттары етештерә башлай.

Ошо осорҙа Сибай ит комбинаты Өфө, Сибай, Баймаҡ, Магнитогорск ҡалаларында үҙенең фирма магазиндарын аса, 25 яңы колбаса төрҙәрен үҙләштерә.

Сибай элеваторы тәүлегенә 120 тонна он тарттырыу ҡеүәтенә эйә булған тирмән төҙөп файҙаланыуға тапшыра.

«Сибайхлеб» асыҡ акционерҙәр йәмғиәте тәүлегенә ярты тонна кондитер изделиелары һәм бер тонна вафли етештереүгә һәләтле цехтарҙы сафҡа индерә.

1990—1998 йылдарҙа төҙөлөшкә капитал һалыуҙар 500 миллион һум тәшкил итһә, шуның 300 миллионы сәнәғәт объекттары төҙөүгә йүнәлтелә. Йыл һайын 25-40 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлә. Әйткәндәй, был һандар республикала иң юғары күрһәткес була. Ошо йылдар эсендә 3080 яңы фатир төҙөлә. Таусылар, Көньяҡ, Көньяҡ-2, Алтын, Арҡайым микрорайондарында 1552 ғаилә яңы йорттарға күсеп сыға.

Шәхси баҡса төҙөлөшө лә йылдам үҫеш ала. Уларҙың майҙаны 442,5 гектарға, ә һаны 6560-ҡа арта.

Сибай ҡалаһында Йәрмөхәмәтов хакимиәт башлығы булып эшләгән осорҙа бер генә яҙыусы ла, артист та, журналист та фатирһыҙ интегеп йөрөмәне. Хәтеремдә, бер шағирҙың ижад кисәһен үткәрергә йөрөгән саҡта Зиннур Ғөбәйҙулла улы минән:

— Ә нимә бүләк итәһегеҙ? — тип һорай ҡуйҙы.

Мин ҡаушабыраҡ ҡалдым. Үҙебеҙҙең бит мөмкинлек юҡ хәлендә. Шулай ҙа ауыҙҙы ҙурҙан астым:

— Ә уның телевизоры юҡ!

— Ярай, мин әйтермен. Алырҙар.

Аҙағыраҡ мин был шағирға яҙыу машинкаһының да Йәрмөхәмәтов тырышлығы менән өҫтәлена килеп ултырғанын белдем.

Йәрмөхәмәтовтың ижад, сәнғәт, мәҙәниәт кешеләренә булған йылы мөнәсәбәте, улар тураһында аталарса хәстәрлек күреүе — ул, бәлки, тарихта быға тиклем булмаған, күренмәгән мөнәсәбәттер. Быны миңә күп тапҡырҙар күрергә тура килде. Яҙыусылар ойошмаһына әҙәби консультант штат бирәмеген юллап алғас, мин тағы уға мөрәжәғәт иттем. Әҙәби консультант булып эшләй башлаған шағирәне Зиннур Ғөбәйҙулла улы ике ай эсендә фатирлы итте. Халҡыбыҙҙың сәнғәтен һәм әҙәбиәтен үҫтереү юлында йөрөгән кешеләргә ҡарашында Йәрмөхәмәтовтың төп һыҙаттары ята: фиҙакәрлек, тәүәккәллек, кешелеклелек һәм ысын патриотизм.

Был йылдарҙа халыҡтың һаулығын һаҡлау эшенә лә ҙур иғтибар бирелә. Күҙ микрохирургияһы, перинаталь үҙәк, дауалау-диагностика үҙәге булдырыла һәм заманса йыһазландырыла.

Метеорологик станция төҙөлә.

Ә инде мәғариф һәм мәҙәни үҫеш яғынан Сибай тотош бер революция яһай. 1991 йылда балалар сәнғәт мәктәбе төҙөлә, 1993 йылда филармония, 1994 йылда ошо төбәктә йәшәгән һәләтле балалар өсөн башҡорт художество гимназияһы, яҙыусылар, рәссамдар ойошмалары асыла. 1996 йылда «Сулпан» балалар театры, 1997-лә Өфө сәнғәт училищеһының филиалы эшләй башлай. 1300 квадрат метр майҙанды биләгән, был төбәктең тәбиғәте һәм кешеләре, ғөрөф-ғәҙәттәре, тарихы хаҡында һөйләгән музей ойошторола һәм ул ҡаланың ғорурлығына әйләнә. Мәсет, Никах һарайы, уларҙың эске биҙәлеше тирә-яҡта бер тигән эстетик өлгөгә әүерелде.

Мәғариф өлкәһендә лә шартлауға тиң үҙгәрештәр кисерә Сибай. Башҡорт балалар баҡсаһы һәм мәктәптән тыш, бында Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты асыла һәм ул халыҡ хужалығының 14 тармағы буйынса белгестәр әҙерләй. Өфө ауыл хужалығы... 



Коллегалар эш өҫтөндә

асыла һәм ул халыҡ хужалығының 14 тармағы буйынса белгестәр әҙерләй. Өфө сауҙа-иҡтисад колледжының филиалы, Магнитогорск тау-металлургия академияһының Сибай политехник колледжының дөйөм техника факультеты эшләй башлай.

Әле был һанап сыҡҡандар Сибайҙа Зиннур Йәрмөхәмәтов хакимиәт башлығы булып эшләгән дәүерҙә башҡарылған, атҡарылған эштәрҙең бер нисәһе, эре-төрөһө генә. Миңә, биш йыл Сибайҙа йәшәп, аҙна һайын оперативкаларға йөрөгән, муниципаль телевидениела эшләгән саҡта сафҡа инәһе объекттарҙан, төҙөлөш майҙандарынан телерепортаждар яһаған кешегә, бөтәһе лә таныш, яҡын һәм ҡәҙерле. Бер ялҡын, дөйөм ынтылыш, яҡты маҡсат булып ойошҡан саҡтарҙың сағыу бер хәтирәһе. Бөгөнгөләй хәтеремдә Зиннур Ғөбәйҙулла улының ит комбинаты эргәһендәге переезды эшләткәне. Ҡала хужалығы өсөн бик мөһим булған был объектты эшләүгә, аңлауымса, бер тин дә бүленмәгәйне. Уны төҙөү ҡала предприятиелары елкәһенә һалынды. Кемдә артыҡ аҡса бар ҙа, кемдә артыҡ ваҡыт, артыҡ техника һәм эшсе көстәр бар? Хужалыҡтарҙың яйына ҡуйһаң, замандың ауырлығына һылтанһаң, әлбиттә, ул эшләнмәйәсәк ине. Зиннур Ғөбәйҙулла улы оперативка һайын предприятие етәкселәрен күтәрҙе, объекттың кәрәклеген тылҡыны, әрләне — барыбер үҙенекен эшләтте. Мин шул саҡта хакимиәт башлығының ҡайһы предприятиела ниндәй төҙөлөш материалы күпме ятыуына тиклем аныҡ белеүенә аптырай торғайным. Ҡайһы бер етәкселәр:

— Ул әйбер юҡ, ҡайҙан алайым? — тип ялтанырға итһә, Зиннур Ғөбәйҙулла улы тап шул әйберҙең ҡайҙа һәм күпме ятҡанын теүәл әйтеп бирә. Бахыр етәксегә:

— Ярай, киләһе аҙнала булыр. Эшләрбеҙ, — тип йыуашайып шымыуҙан башҡа әмәл ҡалмай.

Ул саҡта Зиннур Йәрмөхәмәтов миңә тотош ҡаланы арҡанлап һөйрәтеп килгән мифик геройҙы хәтерләтә ине. Әгәр ҙә Зиннур Ғөбәйҙулла улы Сибайҙағы эшмәкәрлеген ошо нөктәлә туҡтатһа ла, уға бер кем, хатта уны Сибай хакимиәтенә етәксе итергә ҡаршы булған кешеләр ҙә, бер нәмә әйтә алмаҫ ине. Ләкин Йәрмөхәмәтов яңы аҙымы — Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтына директор булып эшкә килеүе менән үҙенең һәм Сибай ҡалаһының тәржемәи хәленең тағы бер битен асты.

* * *

Хакимиәт башлығы булып рәттән ике срок эшләгән кешеләр республикала бик күп булмаһа ла, Зиннур Ғөбәйҙулла улының китеүен ишеткән халыҡ йәнә гөж килде.

Ни өсөн китә? Өфөгә алалармы? Үҙ теләге менәнме, әллә башҡа берәй сәбәп менәнме? Хәбәрҙең төрлөһө йөрөнө был мәлдә Сибайҙа. Бындағы халыҡтың шәхестәр тураһында тел сарларға әүәҫ булыуын белеп өлгөргәнлектән, мин эстән генә йылмайып йөрөнөм: ғәйбәт һүҙҙәрҙең күп булыуы легендаларҙың башы бит ул, ә легенда теләһә кем хаҡында сығарылмай. Ана, «Ирәндек моңдары» фестивале үтә башлағас, халыҡтың ауыҙ-тел, быуаттар төпкөлөнән килгән хазинаһын һаҡлау һәм тергеҙеүгә хеҙмәт иткән был сараны «пир во время чумы» тип атаныллар. Һәм, ғөмүмән, Йәрмөхәмәтов инициативаһы менән башҡарылған эштәрҙең береһе лә кемдең дә булһа ҡаршылығына осрамайынса эшләнмәне. «Сулпан» балалар театрын асыу еңел булдымы ла, элекке партия бинаһын Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге башҡорт театрына биреү анһат булдымы? Өфө сәнғәт училищеһының филиалын асыу ҡаршылыҡҡа осраманымы? Унан һуң бит әле, асыуы — асыу, иң ҡыйыны — асылғанды һүндермәү, уны ҡаланың тәбиғи өлөшөнә әүерелдереү, йәнле, ҡанлы итеү. Йәрмөхәмәтов Сибай институтына директор булып бара икән тигән хәбәр ишетелгәс, мин тап бына ошо хаҡта уйланым. Башҡортостандың көньяғында күп тармаҡлы юғары уҡыу йорто асыу бер нәмә, уны республиканың тотороҡло һәм төп уҡыу йорттарының береһе итеү — икенсе эш. Унын төп корпусын файҙаланыуға тапшырыу ҙа оҙаҡҡа һуҙылды... Ирек Сабир улы Сабиров, институттың элекке етәксеһе, уҡыу йортон асыу, ойоштороу, уға кадрҙар йәлеп итеү буйынса, әлбиттә, ҙур эш эшләне. Әммә юғары уҡыу йортоноң артабанғы яҙмышын төҙөлөш һәм ойоштороу эштәренең маһир оҫтаһына әүерелгән, докторлыҡ диссертацияһы өҫтөндә эшләгән кешенең дауам итеүе тәбиғи хәл кеүек ҡабул ҡылынды.

...Унан бирле өс йыл ваҡыт үтеп тә киткән. Мин Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовтың башҡорт телен һыу кеүек эскән ярҙамсыһы Семен Николаевич Чернов менән институттың яңы корпустары буйлап йөрөйөм. Бөгөн бындағы 4 факультетта 4 мең студент уҡый. Иң ҡыуандырғаны — студенттарҙың күп өлөшө ошо төбәк балалары. Ә инде бындағы аудиторияларҙы, компьютерҙар менән йыһазландырылған залдарҙы күргәс, миндә, иллене үткән кешелә, яңынан студент булғы килеү теләге уянды. Интернетҡа тоташтырылған ете компьютер класы! Проект буйынса тағы ике ошондай класс буласаҡ. Дүрт уҡыу залы булған китапхана, шау көҙгөнән торған хореография залы, ашхана... Һәр хәлдә, минең бында килеп инеп аудиторияларҙы күргәндәге аптырауым Заятүләктең һыу аҫты батшалығына барып эләккәндәге ғәжәпләнеүенән кәм булмағандыр. Ә башҡа уҡыу йортона яраҡлаштырылған биналарҙы реконструкциялау эштәре? Студенттарҙың дөйөм ятағындағы уңай-

лыҡтар? Заманса йыһазландырылған теш кабинетынан алып, кер йыуыу, киптереү бүлмәләре, банкет залына тиклем булдырылған бында. Институттың бер бөтөн команда булып 135 кешенән ойошҡан коллективында бөгөн 7 фән докторы, 60 фән кандидаты эшләй, 30 кеше аспирантурала уҡый. Ә инде киләсәктә Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты базаһында яңы үҙаллы университет булдырыу күҙ алдында тотола. Институт базаһында Өфө радиоэлектроника колледжы филиалы асылған, унда «Дәүләт һәм муниципаль идара», «Ҡулланма математика һәм информатика» йүнәлештәре буйынса диплом алыу мөмкинлеге күптәрҙе Сибайҙағы уҡыу йортона әйҙәйәсәк.

Сибай ҡалаһындағы юғары уҡыу йорто тураһында һүҙ алып барғанда, уның ултырған ере, ундағы ҡаҙылма байлыҡтар тураһында әйтеп үтмәү мөмкин түгел. Ни тиһәң дә, ҡала ошондағы мәғдән базаһы ерлегендә барлыҡҡа килгән, уның киләсәге лә ошо төбәктәге сеймалға бәйләнгән. «Юбилейный», «Подольский» ятҡылыҡтары төбәгенә яңы һулыш өрөү, уларҙы эшкәртеү өсөн яңы көстәр, уҡымышлы кешеләр кәрәк буласаҡ... Әйткәндәй, Йәрмөхәмәтов үҙе лә бит әле таусы (ул Магнитогорск ҡалаһында Тау-металлургия институтын тамамлай һәм кандидатлыҡ диссертацияһын да унда яҡлай). Ошо хаҡта һүҙ сыҡҡас, Зиннур Ғөбәйҙулла улы киләсәктә Сибай институтында тау факультеты асыласағын да әйтте.

Заман һулышын барометр һиҙгерлеге менән тойған, дәүерҙән һәр саҡ алғараҡ сығып фекер йөрөтөүсән, һүҙен эш менән раҫлаусан лидер етәкләгән уҡыу йортоноң башҡаларҙан айырмалы яғы булмаһа, сәйер булыр ине. Ниндәй генә бөйөк идея булмаһын — уның йәшәүгә һәләте матди базаға таяна. Зиннур Ғөбәйҙулла улы етәкләгән институттың да өҫтәмә ресурстары бар. Институт байтаҡ ҡына табышты түләп уҡытыу иҫәбенә ала. Был табыш ситтән белгестәр саҡырып лекциялар уҡытыуға, студенттарҙың белем, аң кимәлен киңәйтеүгә йүнәлтелә. Бынан тыш, уҡытыусылар һәм студенттар экологик тикшеренеүҙәр лабораторияһында фәнни эш алып барып та аҡса таба. Мәҫәлән, Башҡортостан баҡыр-көкөрт комбинаты менән 500 мең һумлыҡ килешеү төҙөлгән. «Иммунопрепарат» унитар предприятиеһы менән берлектә үләндән дарыу эшләү буйынса тикшеренеүҙәрҙең тәүге этабын тамамлау өҫтөндәләр. Институттың үҙенең агробиология станцияһы, 50 умартаһы, ҡымыҙы ла бар. Ошондай килем сығанаҡтары булғанға ла студенттар һәм уҡытыусылар йәй көнө һаулыҡтарын ял йорттарында һәм санаторийҙарҙа нығыта ала торғандыр...

Сибайға яңыраҡ бер барғанда Зиннур Ғөбәйҙулла улы менән ҡырҡ минут самаһы һөйләшеп ултырҙым. Миңә бүленгән ваҡыт ун биш минут булһа ла аптырамаҫ инем, сөнки ул үҙе тураһында бик аҙ һөйләй, ваҡыты минутына ҡәҙәр һанаулы. Уның тураһында яҙырға уйлайһың икән — уның тирәһендәге кешеләргә, ҡайнаған тормошҡа, эшләгән эштәренә ҡара. Әммә бер кешенең тау хәтле эштәр башҡарыуына, диңгеҙ хәтле мәсьәләләрҙе хәл итеүенә ҡарайһың да — ирекһеҙҙән ғәжәпләнәһең дә, һоҡланаһың да. Был юлы, уның менән әңгәмәләшкәс, студент саҡта уҡыған бер фраза иҫкә төштө: «Ренессанс дәүере титандарға мохтаж була, һәм уларҙы тыуҙыра...» Эйе, тап шулай: Хоҙай тарафынан онотолған төбәк Зиннур Йәрмөхәмәтов кеүек шәхескә һыуһаған булған. Һәм ул тыуған. Йәшәй. Ул йәшәгән ер — ҡотҡа, ул йәшәгән заман ырыҫҡа байый. Ул ер улы, мәгәр күңел күҙе йондоҙҙарҙы күҙләй. Хоҙай тарафынан онотолған төбәк өҫтөндә ҡалҡҡан Ҡояш — ул да шул хаҡта һөйләй.

*Тупланманы*
*Таңсулпан Ғарипова әҙерләне.*